***Рәмилә ЙӘҺҮҘИНА,***
***М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының әҙәби бүлеге етәксеһе***

# Һүҙе — ғәмле, үҙе шаян булды



*Шамил Рахман улы Рәхмәтуллин*

Шамил Рахман улы Рәхмәтуллин хаҡында үткән заманда һөйләүҙе зиһен дә, күңел дә ҡабул итмәй. Ул әле лә ап-асыҡ күҙ алдында. Ихлас йылмайып, үҙенә генә хас тауыш менән тәүге һүҙҙәрен әйтеүе була, кеше күңелендә мәңгегә урын ала ине ул. Асылы — ҡояш, һүҙе — ғәмле, үҙе — шаян, янында — үтә рәхәт, был — Шамил ағай Рәхмәтуллин хаҡында.

Тормош аяуһыҙ. Юҡһа, ошо тиклем дә тормошто яратҡан ижад кешеһе, бихисап тамашасыһын бөтмәç һағышҡа һалып, ваҡытынан алда баҡыйлыҡҡа нисек күсһен?!

...Бинахаҡҡа Себергә һөрөлгән Рахман ағай ҙа, ире яҙмышына төшкән бөтә ауырлыҡтарҙы уртаҡ күтәрешкән Сафия апай ҙа улдарының ҡасан да булһа артист һөнәрен һайлап, билдәле шәхес булып китерен күҙ алдына ла килтермәгәндәрҙер. Хәйер, Шамил Рахман улы үҙе лә уйламағандыр. Бер партала ултырған дуçы, билдәле артист Хәй Фәхриев менән Өфө сәнғәт училищеһына ул осраҡлы ғына килеп юлыға. Әммә бөйөк Хажи Ғирфан улы Бохарский ҡулына эләккән егеттә театр сәнғәтенә һүнмәç һөйөү хисе уяна. Үҙенең тәүге уҡытыусыһы һәм остазы тип һанай Шамил Рахман улы Хажи Бохарскийҙы. Училищены тамамлағас, ике йыл Ауырғазы колхоз-совхоз театрында эшләп ала, унан инде Мәскәүгә юл тота. А.В.Луначарский исемендәге Мәскәү дәүләт сәнғәт институтына (хәҙерге Рәсәй театр сәнғәте академияһы) уҡырға ебәрелгән уҡыусылар араһында Шамил Рәхмәтуллин да була. Ул ғүмер буйы үҙенең студент йылдарын, йәшлек дәрте бөркөп торған, күрер күҙгә үҙе бер тамаша булған Мәскәүҙе һағынып та, һоҡланып та һөйләр ине. Уҡытыусылары — бөйөк Борис Владимирович Бибиков, Ольга Ивановна Пыжова, Ольга Ивановна Старостина, Николай Викторович Пажитновтарҙы нисек онотһон ул?! Уларҙан алған дәрестәр Шамил Рахман улының ижадын ғүмер буйы оҙатып килә.

Шамил Рәхмәтуллин 1959 йылдан алып Башҡорт дәүләт академия драма театрында эшләне. Тәүҙән үк үҙен нескә һәм тәрән психологизмға эйә артист итеп танытып, сәйерерәк, тәү ҡарашҡа бер ҡатлыраҡ пер-

сонаждарының эске драматизмын күрһәтә алды, ә трагик яҙмышлы геройҙарын көтөлмәгәнсә йылы һәм ироник төҫтәр менән тулыландыра белде. Шамил Рәхмәтуллин бик күп төрлө ролдәр башҡарҙы, уның репертуарындағы персонаждар ихлас ышандырыуы көсөнә эйә, тәбиғи, халыҡсан булыуы менән йәлеп итә ине. ”Эҙләнеү йылдары”нда (А.Арбузов) — үтеп барыусы, ”Онотма мине, ҡояш!”та (А.Абдуллин) — көтөүсе Саҙрый, ”Кеше бәхете”ндә (Н.Асанбаев) — монтер Ибраев, ”Ул ҡайтты”ла (Ә.Атнабаев) — Шәйхелислам, ”Еҙнәкәй”ҙә (Х.Ибраһимов) — Низами, ”Бажалар”ҙа (И.Абдуллин) — Әбләй, ”Ҡараңғылыҡ хөкөм иткәндә”лә (Л.Толстой) — Аким, ”Ябырылыу”ҙа (Л.Леонов) — һатлыҡ йән Фаюнин, ”Яҙмыштарҙан уҙмыш бар”ҙа (М.Кәрим, Р.Исрафилов инсценировкаһы) — Талип, ”Хужа Насретдин”да (Н.Иҫәнбәт) — Хужа Насретдин ролдәре тап шундай. Әйткәндәй, Хужа Насретдин ролен башҡарыу Ш.Рәхмәтуллиндың күптәнге хыялы була. Халыҡ әйтемдәренә, мәҡәлдәргә, юморға бай был спектаклдә Шамил ағай, актерҙар әйткәнсә, ”йөҙөп уйнай”.

”Әсәйемдең сал сәстәре” драмаһында Шамил Рәхмәтуллиндың таланты икенсе яҡтан асыла. Рәсәй дәүләт сәнғәт институтын тамамлаусы Рафаэль Әйүповтың диплом эше булған был спектакль артисты өр-яңы яҡтан күрһәтә. ”Ул ҡайтты” (Ә.Атнабаев) спектаклендә Шәйхелислам образын да артист тамашасылар хәтерендә ҡалырлыҡ итеп башҡара — шағир булырға ынтылған, кешеләргә тиҙ ышанып барыусан хәҙерге заман йәш кешеһенең үтә ябай, бер ҡатлы булыуы ҡайһы ваҡытта уны көлкөлө хәлгә лә төшөрә.

Үҙ заманында Мостай Кәримдең ”Ай тотолған төндә” трагедияһының тыуыуы бөтә ил мәҙәниәтендә оло бер ваҡиға булғайны. Әҫәрҙең төп персонаждарының береһе — Диуана ролен башҡарған Шамил Рәхмәтуллиндың ижад юлында был образ үҙе бер яңы этап ине. Диуана — донъяны үҙенсә танып белгән, үҙенсә фекер йөрөткән, автор тарафынан ғәжәйеп тәрән фәлсәфәле итеп тыуҙырылған герой. Уның финалдағы монологы быуаттар буйы йәшәп килгән ҡараңғы йолаларға ҡаршы сикһеҙ нәфрәт менән тулы. Тәү ҡарашҡа аҡылға бер төрлө күренгән, бала холоҡло, ышаныусан герой образын Шамил Рәхмәтуллин фәлсәфәүи, трагик камиллеккә күтәреп башҡарҙы.

*М.Кәрим. ”Ай тотолған төндә”.*
*Диуана — Шамил Рәхмәтуллин,*
*Тәңкәбикә — Зәйтүнә Бикбулатова*



Ижадының тәүге осоронан уҡ уны комедиялар оҫтаһы булараҡ таныйҙар. ”Үҙегеҙҙең амплуағыҙҙы нисек билдәләйһегеҙ”, тигән һорауға артист көләмәс формаһында яуап бирә торғайны: ”Режиссер актерҙан уның амплуаһы хаҡында һорай икән. Тегеһе:

— Мин — комик, — тип яуап бирә.

Режиссер һорауын дауам итә:

— Һин өйләнгәнһеңме?

— Эйе, өйләнгәнмен, — ти был.

Режиссер:

— Тимәк, һин трагик та, — тип һығымта яһап ҡуя”.

Шамил ағай үҙенсә дауам итә:

— Ә минең ғаиләм икәү: театрым һәм үҙ ғаиләм. Тимәк, мин трагик та, комик та...”



*Н.Ғәйетбаев. ”Аты барҙың — дәрте бар”*

Ғәҙәттә, комик ролдәрҙе танылған актер образдарҙы башҡаларға ҡарағанда тәрәнерәк психологизм менән башҡарыусан була, ти белгестәр. Мәҫәлән, Юрий Никулинды ғына алайыҡ. Шамил ағайҙың да сәхнә тәбиғәте уға оҡшаш ине.

Шамил Рахман улы әйтеүе буйынса, Мәскәүҙән ҡайтып эш башлаған йылдарҙағы ижады бигерәк тә күңелендә ныҡ уйылып ҡалған. ”Ул саҡтарҙа ниндәйҙер күтәренке рух өҫтөнлөк итте, яңы пьесалар бихисап ине, яңынан-яңы спектаклдәр тыуып торҙо, — тип әйтә ине ул. — Тап ошо осорҙа Әсғәт Мирзаһитовтың ”Әсәйемдең сал сәстәре”ндә Гоша-стиляганы уйнағайным, был ролде маҡтап гәзиткә лә яҙҙылар: ”Шамил Рәхмәтуллин әхлаҡи яҡтан боҙолған кеше образын иҫ киткес шәп башҡарҙы”, тип. Минең күңелгә рәхәт, ә атайымдан шундуҡ хат килеп төштө: ”Һин нимә, боҙоҡ юлда йөрөйһөңмө, әҙәмсә күренерлегең дә ҡалманымы ни?” — тигән. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та була торғайны”. Атаһы роль менән актер эше араһындағы айырманы һуңынан ғына аңлай.

Шамил ағай, сәхнәлә уйнауҙан тыш, үҙе лә күңелен өйкәгән темаларға пьесалар яҙа: ”Ҡош та ояһына ҡайта”, ”Алмағастар сәскә атҡанда”, ”Әжәлгә дарыу бар, тиҙәр” һәм башҡа әҫәрҙәре билдәле. Тәүге пьесаһы — ”Әжәлгә дарыу бар, тиҙәр” комедияһын яҙыуға бик тә мәҙәк хәл сәбәп була. Уның нигеҙендә бер чех яҙыусыһы һөйләгән хәл ята, ә Шамил ағай чех юморын, үҙе әйткәнсә, ”үлеп ярата ине”. Уның һағышлы пьесалары ла бар: ”Һағыш үҙенә күрә бер ҡәнәғәтләнеү хисе ул”, — ти торғайны артист.

”Ҡош та ояһына ҡайта” драмаһы — Шамил Рәхмәтуллиндың унынсы пьесаһы, ул Башҡорт академия драма театры сәхнәһендә бер нисә йыл барҙы. ”Ундағы алты геройҙың да прототибы бар һәм мин уларҙың һәр береһен бик яратам”, ти торғайны Шамил ағай. Үҙенең пьесалары буйынса ҡуйылған спектаклдәрҙе ҡарарға ятыуын да йәшермәй ине, ”үҙем яҙған әҫәрҙәрҙе ҡарауы күңеллерәк”, тип йылмайыр ине. Һуңғы көндәренә тиклем сәхнәгә тоғро ҡалып, тамашасы яратып ҡараған ”Аты барҙың — дәрте бар”, ”Көнләш, Америка, көнләш!”, ”Их, Байтимер дуҫ!..” һәм башҡа спектаклдәрҙә илһамланып уйнаны.

Шамил Рәхмәтуллин хаҡында хәтирәләргә бирелгәндә бер һорау һис тә тынғы бирмәй — танылған, тамашасылар үҙ иткән артистың холҡондағы баҫалҡылыҡ һәм шаянлыҡ ҡайҙан һуң? Шаянлығы — әсәһе Сафия апайҙандыр, моғайын. Рахман ағайҙы хөкөм итеп, Себергә ебәргәс, бәләкәс ҡыҙын эйәртеп, ире артынан китә ул. Әүәлге декабрист ҡатындарынан да былайыраҡ! Сафия апай юлды ла белмәгән көйөнсә, аҡсаһыҙ, ҡайҙа поезға, ҡайҙа пароходҡа ултырып барып, ирен эҙләп таба. Шамил ағай Себерҙә тыуа. Ауыл советында секретарь булып эшләгән Рахман ағай ауылдарындағы бер нисә бабайға ағас яҙҙырып биргән өсөн генә ете йылға хөкөм ителә, ә ҡатыны Сафия апай ғүмер буйы иренең рухын күтәреп йәшәй. Шамил ағай өйләнеп, балалары тыуғас та, Сафия апай ейәндәре менән ҡыҙыҡлы уйындар ойоштора. Һикһән йәште артылған әсәһененең балалар менән уйнауын ирмәк итеп һөйләй торғайны ул. Ике ул үҫтерә Шамил Рахман улы ҡатыны Венера апай менән. Тормошта бөтәһенә лә ваҡыт таба: Башҡортостан яҙыусылар союзы ағзаһы, бик күп скетчтар авторы, ишеткән-күргәндәрен гәзит биттәренә юмореска рәүешендә күсерә, сатирик журналдарҙа баҫтырырға ла өлгөрә. Рәсәйҙең, Башҡортостандың һәм Татарстандың халыҡ артисы Шамил Рәхмәтуллин әүҙем йәмәғәтсе лә булды. Режиссерлыҡ өлкәһендә лә үҙен һынап ҡарап, һәләтле ижадсы итеп танытты.

Ул ҡалдырған сәхнә мираҫы сикһеҙ бай. Актерҙың образдары йөкмәткеле булды, ә үҙе ысын мәғәнәһендә халыҡ артисы ине. Шамил Рахман улын яратып телгә алмаған, уны хәтерләмәгән көн һирәктер Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артистары араһында. Ә 2005 йылдың алтын көҙөндә уға 75 йәш тулған булыр ине.

*М.Фәйзи. ”Ғәлиәбаныу”.*
*Шамил Рәхмәтуллин Бәҙри ролендә*



Шамил ағай тормошта күп яҡлы һәм сағыу һәләтле, йомарт күңелле, ябай, эшкә ғәжәйеп егәрле, баҫалҡы һәм тыныс кеше булды, уға үткер тәбиғи юмор һәм балаларса эскерһеҙлек хас ине. Балаларса тигәндән, уның тыуған көнө лә урамдарҙы тултырып, береһенән-береһе матур кейенгән, аҡ таҫмалар таҡҡан, ҡулдарына портфелдәр һәм ҙур-ҙур букеттар тотҡан уҡыусы балаларҙың мәктәпкә ағылған Беренсе сентябрь көнөнә тура килә. Һәм был көндө ошо букеттарҙың күптәре Шамил ағай Рәхмәтуллиндың ҡулына күсә ине...